# МИФТАХИТДИН АҠМУЛЛА – БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ КҮРЕНЕКЛЕ МӘҒРИФӘТСЕ-ШАҒИРЫ



## 14 ДЕКАБРЬ – БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ



Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!

Аҡмулла



Теше бар –теше менән, теле бар теле менән үткәрә.

Ризаитдин Фәхретдин



Аҡ тамырҙың бер генә киҫәге ерҙә ҡалһа, ваҡыты, уңайлы мәле етеү менән ул бар баҡсаны баҫыр. Беҙҙең халҡыбыҙ ҙа шулай: уңайлы мәл еткәс, тағы ҡалҡыныр, күтәрелер, өҫтөндәге иҙеүселәрҙе алып ташлар…

Әхмәтзәки Вәлиди Туған



Беҙ - үҙебеҙ башҡорттар.

Шәйехзада Бабич



Үҙ әсә телем ү минең өсөн матур, иң тәмле тел,
Үҙ телем, үҙ әйберем булған өсөн ярата күңел.

Мәжит Ғафури



Халҡым теле минә хаҡлыҡ теле, -
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәç кенә телен һөймәç,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Рәми Ғарипов



Әсә теле – иман телем,
Әгәр ине һағынмаһам,
Көн дә һиңә табынмаһам,
Телдәремдән яҙыр инем.

Мостай Кәрим



Күгәреп яткан Уралдай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайындай ҡарт, олапт һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй, йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!

Зәйнәб Биишева



Туған телем - ер-һыуымдың һыны,
Яҡты донъям, һауам, һулышым.
Сал быуаттар, йөҙәр быуын аша
Тыумышымдан килгән булмышым.

Назар Нәжми



Үҙенең йәшәү ғүмерендәге сафлыҡтан ғына башлаған, сәләмәт, ябай һәм боҙолмаған, ниндәй гүзәл халыҡ был башҡорттар.

Л.Н.Толстой



Ике һүҙҙең береһендә – ят тел һүҙе,
Ҡолағымды ярып бара, бөттө түҙем.
Ҡыйналғанмы, ҡыйналҡанмы башҡорт теле?
Кем ғәйепле? – Заманыммы? Әллә үҙем...

Ғәҙим Аралбай



Туғанынан яҙған – ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян,халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Рауил Бикбаев



Мин сикһеҙ хөрмәт итәмен
халҡымдың телен,
Ә кем уны һанға һуҡмай,
хурлай тик үҙен!..

Баязит Бикбай



Туған телем! Тыуған моңдар! Һеҙҙең аша
зиһенемә быуаттар заңы тоташа...

Хәсән Назар.



Башҡорт телен ишеткәс тә, мин торомон ҡәберҙән.

Тимер Йосопов.



Туған тел – ул ата-әсә теле, донъяла тәү ишеткән һүҙең, асылған телең, рухи моңоң.

Ғайса Хөсәйенов



Хафаларым кәмер кеүек
Был донъяла йәһәт кенә –
Халыҡтарым яҙмышында
Телһеҙ ҡалһа сәғәт кенә.

Сафуан Әлибай



Үткән-һүткән хужа булғас һиндә,
Телеңде лә хатта ҡыйырһытҡан.
Әгәр һөйләшмәһәң үҙ телеңдә,
Моңһоу ҡалыуың бар, Башҡортостан.

Яҡуп Ҡолмой



Йәшәү бәхете – илең булыуы,
Атаң һәм әсәң, телең булыуы,
Атаң-әсәң – дым, үҙ телең йәйғор...
Шунһыҙ һин – сүлдә гөлдөң һулыуы.

Әсхәл Әхмәт-Хужа



Моңдан өргән генә зат бит ул – башҡортом,
Йырҙан тыуған ғына зат бит ул – башҡортом,
Буранбайҙың хатын уҡып илағанда
Ул тағы ла тыуған бит ул – башҡортом...

Розалия Солтангәрәева



Яҙмышыбыҙ – тел яҙмышы,
Беләм уның хаҡында:
Әгәр телем йәшәй икән,
Йәшәйәсәк халҡым да.

Ирек Кинйәбулатов



Тел – ул халыҡтың мәңге тере тарихы ла. Шул ғәзиз тел уны борон бер бөтөн халыҡ итеп ойоштороштан; уртаҡ тел, һүҙ таптырған; көнөн, йүнен йүнләшкән; тәжрибәһен үҙенә туплап, уның күркен күтәрешкән; кемлеген бар донъяға танытҡан, халыҡтар менән аралаштырған.

Ғайса Хөсәйенов



Туған телем булмаһа,
Ҡаныма ыу һарылһын,
Ярһып типкән йөрәгем
Шундуҡ шартлап ярылһын.
Абдулхаҡ Игебаев



Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкмәй,
Тоғро булһаң антҡа – шул етә,
Һатмаһаң һин намыҫ – шул етә,
Халҡың өсөн янһаң – шул етә,
Халҡың өсөн янһаң – шул етә!

Тойғон



Бөйөк тимәм аңлашырға һүҙ булғаның өсөн,
Һин бөйөкһөң, телем, үҙ булғаның өсөн.

Риф Мифтахов.



Кешеләрҙе ерҙә тел йөрөтә,
Тылсым асҡысындай тел үҙе;
Йәнебеҙгә, тәнебеҙгә дауа –
Беҙҙең телебеҙҙең диңгеҙе.

Рәшит Шәкүр



Тәбиғәт биргән иң китмәле мөғжизә ул – туған тел. Туған тел – ул тойғо теле, моң теле. Беҙ туған телдә һөйләшеп туғанлыҡ тойғоһон яҡынайтабыҙ, туған телдә йырлап беҙ шатлыҡ ишәйтәбеҙ, ҡайғы таратабыҙ, күңел сафландырабыҙ.

Мәрйәм Бураҡаева



Тән кәрәкһә, ҡырҡып бирәм тәнемде,
Йән кәрәкһә, йолҡоп бирәм йәнемде,
Ҡалдырығыҙ бары телемде...

Әхмәр Үтәбай

# МИФТАХИТДИН АҠМУЛЛА – БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ КҮРЕНЕКЛЕ МӘҒРИФӘТСЕ-ШАҒИРЫ



**14 ДЕКАБРЬ – БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ**